*Сәлимйән ҒҮМӘРОВ,*
*Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы*

# Йәшәү мәғәнәһе — халыҡҡа хеҙмәт итеү



*Закуан Әхмәтов*

Әлшәй районы хакимиәте башлығы урынбаҫары Закуан Зөфәр улы Әхмәтовтың кабинетында һөйләшеп ултырабыҙ. Әммә һөйләшергә форсат юҡ, ишек яғы тынмай, халыҡ уның менән һөйләшергә, зар-хәсрәтен еткерергә сиратҡа баҫҡан. Оло ғына апай инде лә: “Закуан энем, һыйыр тотам, һөт-ҡатыҡһыҙ йәшәп булмай бит, байтаҡ ҡына ваҡ малдарым бар. Бесәнем наҡыҫ, күрше ауылдан һатып алғайным, шуны килтерергә машина таба алмайым. Ярҙам итә алмаҫһығыҙмы?” Закуан Зөфәр улы шунда уҡ ауыл хакимиәте башлығына шылтыратып, мәсьәләне хәл итте. “Инәй, — тине ул, — бесәнең иртәгә үк килер, бушатырға берәй кеше әҙерләп ҡуй”. Апай оло ҡәнәғәтлек менән, рәхмәт әйтеп сығып китте. Икенсе берәү: “Закуан ҡусты, пенсиям етмәй, өҫтәргә ярҙам итегеҙ әле”, — тигән һорау менән мөрәжәғәт итте. “Ағай, — тине ул, — ҡулымдан килһә, бөгөн үк өҫтәр инем, әммә пенсия мәсьәләһен беҙ хәл итә алмайбыҙ. Күңелегеҙгә ауыр алмағыҙ, һорауығыҙҙы ҡәнәғәтләндерә алмайым, ғәфү итегеҙ”. “Балам быйыл юғары уҡыу йортона уҡырға ингәйне, дөйөм ятаҡтан урын бирмәгәндәр. Һеҙгә ышанып килдем инде”, — тип Әхмәтовҡа баҡты. Закуан Зөфәр улы шунда уҡ ректор менән һөйләшеп, мәсьәләне ыңғай хәл итте. Ошонда мин хакимиәт башлығы урынбаҫары менән халыҡ араһындағы эскерһеҙ бәйләнеште, асыҡтан-асыҡ һөйләшеүҙе, бер-береңә булған ышанысты йөрәк түренә һалып ҡуйҙым. “Эсендәге — тышында”, — ти халыҡ. Закуан Әхмәтовҡа тап ошо сифат хас: йәшереп тормай, сер итеп ҡалдырмай, мәсьәләне уртаға

һалып хәл итә. Шундай халыҡсан булыуының серен асыҡлау өсөн мин ирекһеҙҙән уның үткән тормошон барлап сығырға булдым.

Башҡорт дәүләт университетын тамамлағас, ул уҡытыусы, тәрбиәсе, мәктәп директоры, ауыл Советы башҡарма комитеты рәйесе һәм башҡа вазифаларҙы башҡарған. Мин "Башҡортостан уҡытыусыһы" журналының баш мөхәррире булып эшләгәндә, 1990 йылдарҙа Башҡорт АССР-ы Халыҡ мәғарифы министрлығынан, Әлшәй районы Ҡыпсаҡ-Асҡар мәктәбендә бик уңған һәм һәләтле директор эшләй, тип, уның тәжрибәһен өйрәнеп ҡайтырға тәҡдим иттеләр. Башҡортостан уҡытыусыларының белемен камиллаштырыу институты директоры Рәфҡәт Абдуллин менән электричкаға ултырып, ошо мәктәпкә юлландыҡ. "Май сүлмәге тышынан билдәле", — ти халыҡ, беҙҙе матур итеп йыйыштырылған, бағылған мәктәп ихатаһы ҡаршы алды. Ҡабинеттарҙы ҡарап сыҡтыҡ, уҡытыусылар коллективы менән осрашып фекер алыштыҡ. Һәр уҡытыусы мәғарифты яҡшы аңлаған, һәләтле ойоштороусы Закуан Зөфәр улын мәктәп директоры итеп тәғәйенләгәне өсөн мәғариф бүлегенә ҙур рәхмәттәр әйтте. Артабан директор үҙенең йәшәгән йортон күреп сығырға тәҡдим итте беҙгә. Директорҙың йәшәү шарттары менән танышыу беҙҙең өсөн дә әһәмиәткә эйә ине, сөнки шуға ҡарап фекер йөрөтөргә мөмкин.

Өйҙә йылғыр ғына ханым йүгерә-атлай аш-сәй әҙерләп йөрөй. Уның йөҙө миңә бик таныш һымаҡ күренә. Мин Өфөнән Ейәнсура районы Сәғит ауылына ял итергә ҡайтһам, кистәрен ҡулыма гармун алып уйнап ултыра торғайным. Бейеү көйө уйнаһам, ауылдың 9—10 йәшлек ҡыҙҙары туҙан борҡотоп бейеп китә торғайнылар. Шулар араһында ошо ҡыҙ таныш булған һымаҡ ине. Уңайһыҙ булһа ла, һорай ҡуйҙым; "Һеҙҙең атайығыҙ Ҡыуатов Һиҙиәт, әсәйегеҙ Йылҡыбаева Мәсҡүҙә түгелме?" Ул йылмайып: "Нәҡ шулар", — тип яуап бирҙе. Уның ата-әсәһе менән беҙ бергә уйнап, колхозда эшләп үҫтек. Долорес тирә-яҡта дан тотҡан Ҡыуатовтар нәҫеленән булып сыҡты. Ул Закуан Әхмәтов менән бергә 1978 йылда Башҡорт дәүләт университетын тамамлаған. Долоресты Ейәнсура районының Яңыбай ауылына, ә Закуанды Әлшәй районына эшкә ебәргәндәр. Улар уҡыған саҡта уҡ мөхәббәт утында яна башлайҙар. Закуан хатта район үҙәгенән 120 саҡрым алыҫлыҡта ятҡан Яңыбай ауылына бер нисә тапҡыр атлы-йәйәүле барып ҡайта. Дуҫ-иштәре, студенттар, быларҙың яҡын мөнәсәбәттәрен күреп: "Таһир менән Зөһрә лә бербереһенә шундай ғашиҡ тотмағандарҙыр, моғайын", — тип әйтә торған булғандар. Улар былай йәшәй алмағандарын тамам аңлайҙар һәм ғаилә ҡороп ебәрәләр. Мөхәббәт емеше булып ике улдары — Илһам менән Артур донъяға килә. Бер барғанымда Артур: "Олатай, әйҙә Димгә барып балыҡ ҡармаҡлап ҡайтайыҡ", — тигән тәҡдим яһаны. Баланың тәҡдимен кире ҡағыу килешмәҫ ине — икебеҙ ике ҡармаҡ тотоп киттек Дим йылғаһына. Ҡармаҡтарҙы йылғаға ырғытыуыбыҙ булды, Артурҙың ҡалҡыуысы һыу эсенә батып китте. Мин: "Тарт!" — тип ҡысҡырып ебәрҙем. Йүгереп барһам, арыу ғына сабаҡ ҡырсында һикергеләп-тулап ята ине. Башҡаса

бер балыҡ та ҡапманы. Бала шатлығынан ни эшләргә белмәй, балыҡты таҙартты ла әсәһенән табала ҡурып биреүен үтенде. “Олатай, әйҙә балыҡ ашарға”, — тип мине саҡыра башланы. Мин семтеп ҡаптым да: “Иртәгә күп тотҡас, шунда ашарбыҙ”, — тигән булдым. Ул, балыҡты ашағас, хатта бармаҡтарын ялап ҡуйҙы. Уға ҡарап тороу ҙа бер шатлыҡ ине.

Әле шул малайҙар Өфө ҡалаһында йәшәйҙәр, үҙҙәренең ғаиләләре, балалары бар...

Оҫта ойоштороусы, һәләтле педагог Закуан Әхмәтовты район етәксеһе Фәнил Вилданов саҡырып ала ла район мәғариф бүлеген етәкләү бурысын ышанып тапшыра. 1995 йылда Закуан Зөфәр улы оло дәрт менән яуаплы вазифаны башҡарырға тотона. Ул мәғариф өлкәһендәге эштәрҙең күп булыуын яҡшы аңлай ине. Тап ул эшләгән ваҡытта Өфө ҡалаһында “Матур мәктәп” халыҡ-ара конференцияһы үтте, төрлө темаларға күргәҙмәләр ойошторолдо. Унда Әлшәй районынан да мәктәптәр ҡатнашты һәм улар юғары баһаға лайыҡ булды. Артабан район мәктәптәре күп ерҙәрҙә “Матур мәктәп” халыҡ-ара конкурсында әүҙем ҡатнашты, призлы урындар яуланы.

Ә мәғариф бүлеге етәксеһе Рәсәйҙә һәм сит илдәрҙә был конкурстың почетлы ҡунағы булды. “Ҡунаҡ ашы — ҡара ҡаршы”, — ти халыҡ. 1998—1999 йылдарҙа Әлшәй районы мәктәптәре базаһында “Матур мәктәп” хәрәкәтендә ҡатнашыусыларҙың халыҡ-ара конференцияһы булып үтте. Унда төрлө тарафтарҙан вәкилдәр ҡатнашты. Тәжрибә уртаҡлашыу докладтары менән район етәксеһе Фәнил Вилданов, мәғариф бүлеге мөдире Закуан Әхмәтов сығыш яһанылар. Ҡунаҡтар оло ҡәнәғәтлек менән, тәжрибә алып таралдылар, хатта район вәкилдәренә иҫтәлекле бүләктәр тапшырҙылар. Һуңынан матбуғатта “Әлшәй тәжрибәһе” исеме аҫтында ҙур мәҡәлә донъя

*Закуан Әхмәтов (өсөнсө рәттә һулдан икенсе) “Матур мәктәп” халыҡ-ара конкурсында ҡатнашыусылар менән. Севастополь ҡалаһы, 2000 йылдың сентябре*



күрҙе. Закуан Әхмәтов Башҡортостан Мәғариф министрлығы коллегияһы ағзаһы ла булып торҙо.

1999 йылда Әлшәй районында республиканың беренсе президенты Мортаза Рәхимов ҡатнашлығында мәғариф хеҙмәткәрҙәре кәңәшмәһе үткәрелде. Унда хөкүмәт етәкселәре, район һәм ҡала хакимиәте башлыҡтары, уларҙың урынбаҫарҙары, юғары уҡыу йорттары ректорҙары, мәғариф бүлектәре начальниктары, күренекле ғалимдар, йәмәғәтселек вәкилдәре ҡатнашты.

Кәңәшмәгә әҙерлек осоронда миңә Закуан Әхмәтов менән тотош районды гиҙеп сығырға тура килде. Мин уның ойоштороу һәләтенә, колхоз-совхоз, мәктәп етәкселәре менән уртаҡ тел таба белеүенә, аралашыу оҫталығына, мәсьәләләрҙе шунда уҡ хәл итеп китеүенә һоҡланып ҡарап торҙом.

Кәңәшмә юғары кимәлдә үтте. Һуңынан төрлө райондарҙан, ҡалаларҙан делегациялар килеп, тәжрибә өйрәнеп, үҙҙәрендә файҙалана башланылар. Әлшәй тәжрибәһе уртаҡ хазинаға әйләнде. Әйткәндәй, ҡайһы бер уҡытыусыларҙың артабан уҡыу теләген ҡәнәғәтләндереү мәсьәләһе лә ыңғай хәл ителгәйне.

Үкенескә ҡаршы, һис көтмәгәндә район етәксеһе алмашынды. Мәғариф өлкәһендә ҙур абруй ҡаҙанған Закуан Әхмәтов райондың почта начальнигы итеп күсерелде. Әлбиттә, эш һөйгән, хеҙмәт яратҡан кеше унда ла юғалып ҡалманы. Почта эшен тәртипкә һалыуға ең һыҙғанып тотондо, был өлкәлә лә абруй ҡаҙанып өлгөрҙө.

Мин уны шул осорҙа 2—3 тапҡыр күрҙем. Эше һәйбәт барһа ла, йөҙөндә ҡәнәғәтлек тойғоһо күрмәнем. Ул бит мәғариф өлкәһенә күнеккән, шунда үҙен тапҡан, раҫлаған шәхес. Мин барып инеү менән: “Сәлимйән ағай, мәғарифта ниндәй яңылыҡтар бар? Һеҙ күп йөрөйһөгөҙ, беләһегеҙҙер”, — тип һорауҙар яуҙыра башлай. Күҙҙәре янып, йөҙө асылып китә. Мин уны йыуатҡан төҫлө: “Закуан, был һинең урының түгел, оҙаҡламай был эште ҡалдырып китәсәкһең”, — тим. Был һүҙҙәрем хаҡ булып сыҡты.

Оҙаҡламай район етәксеһе итеп педагогиканы яҡшы аңлаған, мәктәп директоры булып эшләгән, халыҡ психологияһына ҙур иғтибар менән ҡараған Дамир Мостафин тәғәйенләнде. Ул район өсөн кадрҙар әҙерләүҙә мәктәптәрҙең ролен яҡшы аңлай ине, сөнки үҙ иңендә татыған. Мостафин Закуан Әхмәтовҡа социаль мәсьәләләр буйынса урынбаҫары вазифаһын тәҡдим итә.

Бөгөн Әлшәй районы күптәр өсөн өлгө булып тора. Мәҫәлән, етем балаларға фатир бүлеп биреү уңышлы хәл ителә, мәктәптәрҙә уҡытыу-тәрбиә процестарында яңы технологиялар ҡулланыу, электрон уҡытыу, һәләтле балалар менән эшләү буйынса ҙур эштәр алып барыла, ат спорты үҫеш ала, хоккей уйынын пропагандалауға айырым иғтибар бирелә. Районда социаль һәм иҡтисади яҡтан да үҫеш күҙәтелә. Һаулыҡ һаҡлау өлкәһенә лә ҙур иғтибар бирелә. Район етәкселәре фольклор, шәжәрә байрамдары, келәм оҫталары күргәҙмәләре ойоштороуға ла ваҡыт таба. Ошо йүнәлештә күрше Дәүләкән районы менән мәҙәни бәйләнештәр яҡшы көйләнгән.

Бынан ун йыл элек Закуан Зөфәр улы менән Долорес ханымдың 50 йәшлек юбилейҙарында ҡатнашыу бәхете тейгәйне. Улар тураһында:

Бөтмәҫ уңышлыҡтар юлдаш булһын,
Ил уҙамандары эшенә.
Ғаиләңдән уңдың, бәхет бөркә,
Тағы нимә кәрәк кешегә! —

тип яҙғайным.

Был изге һүҙҙәр уларҙың икеһенә лә берҙәй тигеҙ ҡағыла. Закуан менән Долорес икеһе лә 1956 йылдың апрелендә донъяға килгән. Район мәғарифын үҫтереүгә күп көс һәм тос өлөш индергән педагогтар. Закуан Әхмәтов — Башҡортостандың атҡаҙанған халыҡ мәғарифы хеҙмәткәре, ә Долорес — Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы, районда ҙур абруй ҡаҙанған башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы.

Әхмәтовтарҙың 50 йәшлек юбилейында уларҙың 60 йәшлек тантанаһын да бергәләп үткәрергә тип һүҙ ҡуйышҡайныҡ. Әммә яҙмыш беҙҙең теләктәрҙе иҫәпкә алманы, мәсьәләне үҙенсә хәл итте — Долорес Ҡыуатова мәңгелек донъяға күсте. Ә унда йәшәү дәрте ниндәй көслө ине! Долоресты ерләгәндән һуң көндәлегемә ошоларҙы яҙып ҡуйғайным:

Яҙмыш ҡайһы саҡта бик аяуһыҙ,
Хатта бер нимәгә ҡарамай.
Мәңгелек донъяға алып китә
Яҡындарынан да һорамай.

Әле Закуан Долорестың һеңлеһе Минзиә ханым менән яңы ғаилә тормошон башлап ебәрҙе. Минзиә Рәхимйән һәм Миңъямал Йомалиндарҙың күп балалы ғаиләһендә үҫте.

Әле ғаилә Закуан Зөфәр улының 60 йәшлек юбилейын билдәләргә әҙерләнә. Уға ныҡлы һаулыҡ, оҙон ғүмер, һәр ваҡытта ла үҙенә хас кешелеклелек сифаттарын һаҡлап ҡалыуын теләйем!

*Закуан Зөфәр улы Әхмәтов яҡындары менән*

